Башҡортостан Республикаһы Учалы районы муниципаль районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Ә.Ғ. Хөснөтдинов исемндәге Учалы ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмә ултырышында ҡаралды.Протокол № 1 “29”август 2023 йыл Етәксеһе: Нотфуллина Р.В. _________ | Килешелде: Уҡытыу –тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары: Ғилмитдинов А.Р. ____________ | Раҫлайым: Мәктәп директоры: Кирәева Г.Ә. _____ Бойороҡ №1 29авг.2023йыл |
|---|---|---|

**5-9-сы кластар өсөн ӨСӨН «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ БУЙЫНСА**

**2023-2024 уҡыу йылына эш программаһы**

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11 кластары өсөн “ Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт предметы буйынса белем биреү өлгө программалары ” китабына нигеҙләнеп төҙөлдө авт. В.И. Хажин, Ә.Х.Вилданов , Ф.Ә.Аҡҡужина.-Өфө : Китап,2017.

Төҙөнө: юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы Нотфуллина Р.В.

**ЙӨКМӘТКЕҺЕ**

АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ ..........

“Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметына дөйөм характеристика ..........

"Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметын өйрәтеү маҡсаты һәм бурыстары ..........

"Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны ..........

"Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметының төп йүнәлештәре..........

“ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛ” УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ ..........

- 5-се класс ..........
- 6-сы класс..........
- 7-се класс ..........
- 8-се класс ..........
- 9-сы класс..........

ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ “ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛ” УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ ПРОГРАММАҺЫН ҮҘЛӘШТЕРЕҮ БУЙЫНСА БИЛДӘЛӘНГӘН ҺӨҘӨМТӘЛӘР..........

Шәхси һөҙөмтәләр..........

Метапредмет һөҙөмтәләр..........

Предмет һөҙөмтәләре..........

Кластар буйынса предмет һөҙөмтәләре ..........

- 5-се класс ..........
- 6-сы класс..........
- 7-се класс ..........
- 8-се класс ..........
- 9-сы класс..........

ЯҠЫНСА ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ ..........

- 5-се класс (68 сәғ.)..........

6-сы класс (68 сәғ.)........................................................................................................
7-се класс (68 сәғ.)........................................................................................................
8-се класс (68 сәғ.)........................................................................................................
9-сы класс (68 сәғ.)........................................................................................................

ҠУШЫМТА ........................................................................................................................

Ҡушымта 1 Яҙма эштәр текстары ...............................................................................
Ҡушымта 2. Уҡытыу-методик һәм мәғлүмәти ресурс менән тәьмин ителеше Уҡытыу-методик әҙәбиәт

Ҡушымта 3.Баһалау критерийҙары

**АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ**

Төп дөйөм белем алыусы 5-9-сы кластар өсөн “Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметының өлгө эш программаһы (артабан – Программа) уҡыу йылдары буйынса уҡыу предметының йөкмәткеһен, уҡытыуҙың төп методик стратегияларын, “Туған (башҡорт) тел” уҡытыу предметы саралары аша уҡыусыларҙы тәрбиәләүҙе һәм үҫтереүҙе билдәләй.

Программаның норматив-хоҡуҡи базаһы:

– Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы;

– “Рәсәй Федерацияһының мәғариф тураһында” Федераль законы (29 декабрь 2012 йыл, № 273-ФЗ);

– “Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының телдәре тураһында” Рәсәй Федерацияһының законы (25 октябрь, 1991 йыл, №1807-1);

– Төп дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт белем биреү стандарты (31 май, 2021 йыл, № 287 Рәсәй Федерацияһының мәғариф министрлығы фарманы менән раҫланған);

– Төп дөйөм белем биреүҙең өлгөлө төп белем биреү программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһенең ҡарары менән раҫланған, № 1/22 протокол, 18 март, 2022 йыл);

– Тәрбиә эшенең өлгөлө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһенең ҡарары менән раҫланған, №3/22 протокол, 23 июнь, 2022 йыл).

Программа уҡытыу рус телендә алып барылған башланғыс дөйөм белем биреүҙе тормошҡа ашырыусы Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәренең дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн әҙерләнгән һәм "Туған тел һәм туған әҙәбиәт" предмет өлкәһендә эшләүсе уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

Программаның йөкмәткеһе системалы-эшлекле йүнәлешкә ярашлы төҙөлгән һәм дөйөм белем биреүҙең “Туған тел һәм туған әҙәбиәт” предмет өлкәһендәге Федераль дәүләт белем биреү стандарты (артабан – ФГОС) талаптарына ярашлы төп дөйөм белем биреү программаһының төп белем биреү программаһын үҙләштереү һөҙөмтәһенә өлгәшеүгә йүнәлтелгән.

Дәреслектәр һәм эш программалары төҙөүсе авторҙар уҡыу материалдарының күләмен һәм йөкмәткеһен киңәйтеү, шулай уҡ уҡыусыларҙы үҫтереү һәм тәрбиәләүҙә булышлыҡ итеүсе эш төрҙәрен тәҡдим итеү хоҡуғына эйә.

## “Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметына дөйөм характеристика

“Туған (башҡорт) тел” курсы уҡыусыларҙың милли мәҙәниәтте үҙләштереү һәм тормошта үҙ урынын таба белеү ҡоралы булараҡ туған телде өйрәнеүҙә ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән. “Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметы башҡа туған телдәрҙе өйрәнеүсе уҡыусыларҙың хоҡуҡтарын сикләмәй.

“Туған (башҡорт) тел” курсының йөкмәткеһендә уҡыусыларҙың белемдәрен телдең грамматик төҙөлөшө буйынса камиллаштырыу түгел, ә телмәр системаһының тормошта ҡулланылыу мәсьәләһе ҡаралған, телдең тышҡы күренеше күберәк сағылыш тапҡан: туған телдең халыҡтың тарихы һәм мәҙәниәте менән бәйләнешенә ҙур иғтибар бирелгән.

Программа башҡорт теленең социомәҙәни контексы, атап әйткәндә, тел аспекттарын сағылдыра, улар туранан-тура мәҙәни һәм тарихи шарттарға бәйле.

## “Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметын өйрәнеү маҡсаты һәм бурыстары

“Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметын өйрәтеү **маҡсаты** – телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен һәм туған телдә аралашыу мәҙәниәтен камиллаштырыу, тел ғилеме бүлектәренә ярашлы башҡорт теленең спецификаһы, төп тел берәмектәре тураһында белемде киңәйтеү; күп мәҙәниәтле йәмғиәттә Рәсәй граждандлыҡ оҡшашлығын формалаштырыу.

## “Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметын өйрәнеү бурыстары:

– уратып алған кешеләр менән формаль һәм формаль булмаған шарттарҙа шәхес-ара һәм мәҙәни-ара аралашыу һәләттәрен үҫтереү;

– туған (башҡорт) телдең коммуникатив һәм эстетик сараларын тормошта ҡулланыу;

– туған тел тураһында ғилми белемде системалаштырыу һәм киңәйтеү; унының кимәлдәре һәм берәмектәре араһындағы бәйләнеште аңлау; тел ғилеменең мөһим төшөнсәләрен, туған телдең төп берәмектәрен һәм грамматик категорияларын үҙләштереү;

– һүҙгә төрлө лингвистик анализ эшләү күнекмәләрен (фонетик, морфемик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), шулай һүҙбәйләнешкә һәм һөйләмгә синтаксик анализ, тексҡа күп яҡлы анализ башҡарыу һәләттәрен формалаштырыу;

– актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу, аралашыу стиленә һәм ситуацияһына ярашлы ирекле фекер һәм хис-тойғо белдереү өсөн телмәрҙә туған (башҡорт) телдең грамматик сараларын ҡулланыу күләмен киңәйтеү;

– туған тел лексикаһынының төп стилистик ресурстары һәм фразеологияһы, төп тел нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләренә эйә булыу; уларҙы телмәр практикаһында һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу тәжрибәһенә өлгәшеү;

– бөтә кешелек ҡиммәте рәүешендә ҡабул итеп, тел мәҙәниәте өсөн яуаплылыҡ формалаштырыу.

## **“Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметының уҡыу планында урыны**

Федераль дәүләт уҡытыу стандарттарына ярашлы «Туған тел» уҡыу предметы «туған тел һәм туған әҙәбиәт» предмет өлкәһенә ҡарай һәм өйрәнеү өсөн мотлаҡ булып тора.

“Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметын өйрәнеү өсөн бөтәһе 340 сәғәт бүленә: 5-се класта – 68 сәғәт, 6-сы класта – 68 сәғәт, 7-се класта – 68 сәғәт, 8-се класта – 68 сәғәт, 9-сы класта – 68 сәғәт, аҙнаһына – 2-шәр сәғәт.

Белем биреү учреждениеһы предметты өйрәнеү өсөн бирелгән сәғәттәрҙе белем биреүҙә ҡатнашыусыларҙың планына ярашлы үҙ аллы арттырыу хоҡуғына эйә.

**“Туған ( башҡорт ) тел” укытыу предметының төп йүнәлештәре**

Курстың йөкмәткеһе тел ғилеменең төп бүлектәренә ҡараған (фонетика, лексика, морфология, синтаксис) төшөнсәләрҙе өйрәнеүгә нигеҙләнә һәм тел берәмектәре менән эшләү алымдарын үҙләштереүгә йүнәлтелә. Башҡорт теленең факттары рус телендәге тел күренештәре менән сағыштырмаса планда уҡытыла.

Уҡыусыларҙың туған тел тарихы тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү маҡсатынан, Программала башҡорт теленең үҙгәреү һәм үҫеү процесын сағылдырған тарихи мәғлүмәттәр бирелә. Шулай уҡ тарихи йырҙарҙа, мәҡәлдәрҙә һәм ҡобайырҙарҙа осраған боронғо һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһе аңлатыла (туғанлыҡ терминдары, башҡорттарҙың боронғо көнкүрешен сағылдырған һүҙҙәр, географик атамалар, рәсми эш башҡарыу менән бәйле һүҙҙәр).

Програмала уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыусы бөтә эш төрҙәре ҡаралған (тыңлау, йәнле һөйләү практикаһы, уҡыу, яҙыу). Телмәр эшмәкәрлеге тел материалын өйрәнеүҙә лә, текст өҫтөндә эшләүҙә лә урын ала.

Предмет-ара бәйләнештең урын алыуы һәм уның йөкмәткеһенең билдәле бер метапредметлыҡ һөҙөмтәһенә ирешеүе күҙ уңында тотолоп, Программаға биология, география, математика, тарих, экология менән бәйле текстар индерелде.

Башҡорт мәҙәниәтен төплө аңлау һәм башҡорт халҡының менталитетын яҡшыраҡ төшөнөү өсөн туған (башҡорт) телде өйрәнеү барышында туған (башҡорт) әҙәбиәт курсы менән параллелдәр мотлаҡ булдырыла.

Программаның йөкмәткеһе төп ике йүнәлеш буйынса алып барыла. Тәүге йүнәлеш – “Телмәр эшмәкәрлеге һәм телмәр мәҙәниәте” – йәнле һөйләү һәм аралашыу һәләттәрен формалаштыра. Икенсе йүнәлеш – “Тел тураһында төп мәғлүмәт. Тел ғилеменең бүлектәре” – уҡыусыларҙың лингвистик компетенцияларын формалаштырыуға йүнәлтелгән; башҡорт теленең төҙөлөшөн сағылдырыусы һәм тел берәмектәренең үҙенсәлекле функцияларын күрһәтеүсе бүлектәрҙе үҙ эсенә ала.

## “ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛ” УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**5-се класс**

**Бүлек 1. Телмәр эшмәкәрлеге һәм телмәр мәҙәниәте**

Уҡыусыларҙың коммуникатив һәләттәрен камиллаштырыу: башҡорт теленең орфоэпияһы буйынса күнегеүҙәр эшләү.

Баҫым. Башҡорт телендә баҫымдың үҙенсәлеге.

Инеш диктант (75 һүҙ).

Халыҡ ижады әҫәрҙәре менән эш: иҫкергән һүҙҙәрҙе һәм фразеологизмдарҙы табыу, уларҙың мәғәнәләрен аңлатыу.

Монолог. Диалог. Полилог. Диалогтар төҙөү.

Фразеологизмдар менән һөйләмдәр төҙөү.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп нормалары.

Телмәр этикетының традициялары һәм нормалары. Яғымлылыҡ һүҙҙәре.

Аралашыуҙа телмәр мәҙәниәтенең нығынған формулалары.

**Бүлек 2. Тел тураһында төп мәғлүмәт. Тел ғилеменең бүлектәре**

1–4-се кластарҙа үткән материалдарҙы ҡабатлау.

Төрки телдәр араһында башҡорт теле.

Лексика. Башҡорт теленең лексик төҙөлөшө. Төп башҡорт һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Башҡорт телендә синонимдар, антонимдар һәм омонимдар.

Фразеологик берәмектәр. Фразеологизмдарҙың функциялары. Фразеологизмдар менән һөйләмдәр төҙөү.

Фразеологик берәмектәрҙе таныу, уларҙың мәғәнәһен аңлау маҡсатында әҙәби әҫәрҙәр менән эш.

Фонетика: башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре; башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре (һуҙынҡы өндәрҙең тулы характеристикаһы).

Башҡорт теле тартынҡы өндәренең үҙенсәлектәре (ғ, һ, ң, ç).

Һүҙҙең төҙөлөшөндә ҡайһы бер хәрефтәрҙең ҡулланыу үҙенсәлектәре: препозиция, интерпозиция һәм постпозиция. Башҡорт теленең орфографик нормаларын нығытыу маҡсатында практик күнегеүҙәр эшләү.

Ижек. Һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеү.

Башҡорт һәм рус теләндә баçымдың үҙенсәлеге. Баçымдың төрҙәре.

Алфавит (ҡабатлау). Алфавит тураһында төшөнсә. Башҡорт һәм рус алфавиты.

Морфология. Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр.

Сифат. Төп сифаттар. Шартлы сифаттар.

Башҡорт теленең һүҙ төҙөлөшө. Һүҙҙең тамыры. Тамыр. Ялғауҙар. Аффикстарҙың (ялғауҙарҙың) төрҙәре: һүҙ үҙгәртеүсе, һүҙ яһаусы, форма яһаусы ялғауҙар.

Һүҙьяһалыш юлдары. Ауыр яҙылышлы һүҙҙәр. Ауыр яҙылышлы һүҙҙәрҙе яҙыу ҡағиҙәләре.

Орфографик һиҙгеректе үçтереүсе күнегеүҙәр.

Диктант (80 һүҙ).

Үткән темаларҙы ҡабатлау.

## 6-сы класс

### Бүлек 1. Телмәр эшмәкәрлеге һәм телмәр мәҙәниәте

5-се класта үткән материалдарҙы ҡабатлау: монолог, диалог, полилог. Башҡорт теленең фразеологизмдары. Иçкергән һүҙҙәр.

Башҡорт теленең орфоэпик нормалары.

Инеш диктант (85 һүҙ).

Башҡортостан тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт. Башҡортостан ономастикаһы. Башҡортса топонимик берәмектәр, үҫемлек атамалары менән эш. Географик объекттарҙың атамалары буйынса орфографик күнекмәләр.

Урал тауына арналған текстар менән эш.

Этнографик характерҙағы текстар менән эш.

Баҫым. Башҡорт телендә баҫымдың үҙенсәлектәре: ҡатмарлы һүҙҙәргә, һорау алмаштарына ялғау ҡушылыуы.

**Бүлек 1. Тел тураһында төп мәғлүмәт. Тел ғилеменең бүлектәре**

Исем. Исемдең килеш формалары. Башҡорт телендә килеш ялғауҙарының ванианттары. Килеш формаларын рус теленә тәржемә итеү.

Башҡорт телендә исемдәрҙең үҙгәреш үҙенсәлектәре. Башҡорт телендә һүҙ үҙгәреш барышын рус телендәге күренештәр менән сағыштырыу.

Башҡорт телендә исемдең һан һәм зат менән үҙгәреше. Рус телендәге был күренеш менән сағыштырыу.

Исемдәрҙең яһалышы: яһалма исемдәр, ҡушма исемдәр. Башҡорт һәм рус телдарендә һүҙьяһалыш ысулдары.

1812 йылғы Ватан һуғышына арналған текстар менән эш: иҫкергән һүҙҙәрҙе асыҡлау, хәрби лексика, фразеологик берәмектәрҙе билдәләү.

Исемдәрҙең эйәлек категорияһы. Башҡорт һәм рус телдәрендә эйәлекте белдереү саралары.

Башҡорт телендә эйәлек ялғауының икенсе функцияһы.

Сифат. Һүҙ төркөмө булараҡ сифатҡа башҡорт һәм рус телдәрендә характеристика. Сифат дәрәжәләре: төп, сағыштырыу, аҙһытыу, артыҡлыҡ.

Төп һәм шартлы сифаттар. Шартлы сифаттарҙың функциональ үҙенсәлектәре. Сифаттарҙың үҙгәреше.

Сифаттарҙың яһалышы. Яһалма һәм ҡушма сифаттар. Һүҙ яһаусы нигеҙ функцияһында сифаттар.

Башҡорт әҙәби теле.

Һан. Һан төркөмсәләре: төп һан, рәт һаны, йыйыу һаны, бүлем һаны, сама һаны. Һандарҙың үҙгәреше. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

Алмаш. Алмаштарҙың функциональ үҙенсәлектәре. Алмаш төркөмсәләре: зат алмаштары, күрһәтеү алмаштары, һорау алмаштары, билдәләү алмаштары, билдәһеҙлек алмаштары, юҡлыҡ алмаштары.

Диктант (95 һүҙ).

Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау: исем, сифат, һан, алмаш.

## 7-се класс

### Бүлек 1. Телмәр эшмәкәрлеге һәм телмәр мәҙәниәте

Лексика: омонимия һәм парономия. Омонимдарҙың төрҙәре. Омонимдарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

Паронимдар һәм телмәр теүәллеге. Паронимдарҙы телмәрҙә ҡулланыу, уларҙағы мәғәнә айырмалыҡтары, функциональ стиль билдәләре. Паронимдарҙы телмәрҙә ҡулланыуҙа киң таралған хаталар.

Башҡорттарҙың традицион телмәр этикеты. Һөйләшеүҙә ҡәтғиллекте булдырмау. Вербаль булмаған (һүҙһеҙ) аралашыу этикеты.

Ым-ишара ҡулланыу этикеты. Телмәрҙе алмаштырыусы һәм һөйләшеү барышында ҡулланылған ым-ишаралар.

### Бүлек 2. Тел тураһында төп мәғлүмәт. Тел ғилеменең бүлектәре

Башҡорт теленең фонетикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфологияһы буйынса темаларҙы ҡабатлау. Һүҙҙәрҙең һүҙ төркөмдәренә бүленеше. Исем һүҙ төркөмөнөң үҙгәреүе. Һандарың дөрөҫ яҙылышы.

Инеш диктант (90 һүҙ).

Ҡылым. Эйәле һәм эйәһеҙ ҡылымдар.

Ҡылымдарҙың тематик төркөмдәре.

Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.

Ҡылым һөйкәлештәре. Хәбәр  һөйкәлеше. Хәбәр һөйкәлешенең заман формалары.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының синтаксик функцияһы.

Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымы. Бойороҡ һөйкәлешенең семантик төрҙәре.

Теләк һөйкәлеше ҡылымы.

Шарт һөйкәлеше.

Ҡылым формалары. Исем ҡылым. Сифат ҡылым. Сифат ҡылымдың заман формалары. Уртаҡ ҡылым (инфинитив). Хәл ҡылым. Башҡорт телендә хәл ҡылым формалары.

Рәүеш. Рәүеш төркөмсәләре.

Башҡорт һәм рус телендә һан.

Проект эше.

Ярҙамсы һүҙҙәр. Теркәүестәр, бәйләүестәр, киҫәксәләр. Башҡорт һәм рус телендә бәйләүестәр һәм уларҙың функциялары.

Ымлыҡтар.

Диктант (100 һүҙ).

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре буйынса практик эш.

**8-се класс**

**Бүлек 1. Телмәр эшмәкәрлеге һәм телмәр мәҙәниәте**

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпик нормалары.

Хәҙерге телмәрҙә осраған типик орфоэпик хаталар.

Һүҙ башында [v] һуҙынҡыһының [в] урынына әйтелеүе, ғәрәп, фарсы һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы.

[И] һуҙынҡыһының һүҙ аҙағында дөрөҫ әйтелеше.

Лексика: синонимия, синонимик рәт. Телмәр формулаларының синонимияһы.

Телмәр этикетынын тактикалары һәм коммуникациялары.

**Бүлек 2. Тел тураһында төп мәғлүмәт. Тел ғилеменең бүлектәре**

7-се класта үткән материалды ҡабатлау: ҡылым, рәүеш, ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Һүҙ төркөмдәрен айырыу ысулдары.

Яҙма эш: инеш диктант (110 һүҙ).

Ябай һөйләм синтаксисы. Интонация һәм һөйләү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре: хәбәр һөйләм, һорау һөйләм, бойороҡ-өндәү һөйләм.

Һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнеү юлдары. Теҙмә бәйләнеш. Эйәртеүле бәйләнеш.

Синтаксик бәйләнеш төрҙәре: ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү (изафет). Башҡорт һәм рус телендә һүҙҙәрҙең бәйләнеү төрҙәрен сағыштырма анализлау.

Һөйләм төҙөлөшө. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә. Хәбәр. Эйә һәм хәбәр функцияһында һүҙ төркөмдәре.

Башҡорт һәм рус телендә һөйләмдә һүҙ тәртибе.

Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Тиң һәм тиң булмаған аныклаусылар, уларҙың һөйләмдә функциональ үҙенсәлектәре.

Тултырыусы. Тултырыусы функцияһында һүҙ төркөмдәре. Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар.

Салауат Юлаев тураһындағы әҫәрҙәр тексты өҫтөндә эшләү: лексик анализ, синтаксик анализ.

Хәл. Хәл төрҙәре. Ваҡыт хәле, урын хәле, сәбәп хәле, маҡсат хәле, күләм-дәрәжә хәле.

Ҡыш темаһына арналған текстар өҫтөндә эшләү.

Бер һәм ике составлы һөйләмдәр. Йыйнаҡ һөйләм. Тарҡау һөйләм.

Бер составлы һөйләмдәр: билдәле эйәле һөйләм, дөйөм эйәле һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, эйәһеҙ һөйләм, атама һөйләм.

Тулы һәм кәм һөйләмдәр.

Айырымланған эйәрсән киҫәктәр.

Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр. Инеш һүҙҙәр, инеш һүҙбәйләнештәр һәм инеш һөйләмдәр.

Проект эше.

Тура телмәр. Ситләтелгән телмәр.

Яҙма эш: диктант (120 һүҙ).

## 9-сы класс

### Бүлек 1. Телмәр эшмәкәрлеге һәм телмәр мәҙәниәте

Телмәрҙең функциональ стилдәре. Ябай һөйләү стиле. Рәсми стиль. Публицистик стиль. Нәфис әҙәбиәт стиле. Фәнни стиль.

Доклад, сығыш яһау, хәбәр итеү.

Проект яҡлауҙа оппоненттың сығышы.

Телмәр мәҙәниәте. Телмәр мәҙәниәте проблемаһы булараҡ сит тел һүҙҙәрен ҡулланыу.

Нәфис әҙәбиәт теле. Художестволы әҫәрҙә диалог.

Текст һәм интертекст. Афоризмдар. Өлгөлө текстар.

Реклама тексы, уның тел һәм структур үҙенсәлектәре.

Хәҙерге мәктәп уҡыусыһының телмәр хаталары.

Интернетта аралашыу этикаһы һәм этикеты.

Социаль селтәрҙәрҙә аралашыу этикеты.

Интернетта фекер алышыу, интернет-диспут нормалары, этикет тәртибе.

**Бүлек 2. Тел хаҡында төп мәғлүмәт. Тел ғилеменең бүлектәре**

Башҡорт теленең лингвистик һүҙлектәре. Академик һүҙлек. Аңлатмалы һүҙлек. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. Башҡорт теленең ономастик һүҙлектәре.

Башҡорт телендә төп фонетик процестар.

Проект эше.

Башҡорт йәнле һөйләү теленең ерле үҙенсәлектәре. Диалектизмдар.

Синтаксис. Һүҙ һәм һөйләм. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр.

Ҡушма һөйләм синтаксисы. Теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесһеҙ һәм теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр.

Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Эйәрсән ҡушма һөйләмдәрҙең төрҙәре.

Башҡорт телендә ҡатмарлы синтаксик конструкциялар.

**ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ “ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛ” УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ ПРОГРАММАҺЫН ҮҘЛӘШТЕРЕҮ БУЙЫНСА ҺӨҘӨМТӘЛӘР**

**Шәхси һөҙөмтәләр**

“Туған (башҡорт) тел” предметы буйынса өлгө эш программаһы дөйөм белем биреү кимәлендәге шәхси һөҙөмтәләр уҡыу һәм тәрбиә биреү эшмәкәрлегенең берҙәмлегенән сығып тормошҡа ашырыла. Был эшмәкәрлек Рәсәйҙәге традицион социаль һәм мәҙәни, рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәргә, йәмғиәттә ҡабул ителгән тәртип ҡағиҙәләре һәм нормаларына ярашлы алып барыла; улар шәхестең үҙ-үҙен танып белеүенә, үҙенең тәрбиәләүенә һәм үҫешенә, эске ҡарашын формалаштырыуға булышлыҡ итә.

“Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә 5–9-сы класс уҡыусыларында түбәндәге шәхси һөҙөмтәләр формалаша:

***граждандар тәрбиәләү:***

– граждандың бурыстарын башҡарыуға һәм уның хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыуға әҙерлек, башҡа кешеләрҙең хоҡуҡтарын, иреклеген һәм законлы мәнфәғәттәрен ихтирам итеү;

– ғаилә, белем биреү ойошмалары, урындағы берләшмә, тыуған яҡ һәм ил тормошонда актив ҡатнашыу, шул иҫәптән туған (башҡорт) телдә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡан күренештәр менән сағыштырыу; экстремизмдың һәм дискриминацияның төрлө формаларын ҡабул итмәү;

– төрлө уртаҡ эшмәкәрлеккә әҙерлек, үҙ-ара аңлашыуға һәм ярҙамға ынтылыу; мәктәп үҙидараһында әүҙем ҡатнашыу;

– гуманитар эшмәкәрлектә ҡатнашыуға әҙерлек (мохтаж кешеләргә ярҙам итеү; ирекмәнлек);

***илһөйәрлек тәрбиәһе:***

– күп мәҙәниәтле һәм күп конфессиялы йәмғиәттә Рәсәйҙең граждандлыҡ берҙәйлеген Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының башҡа туған телдәр рәтендә туған (башҡорт) телдең ролен аңлау;

– “Туған (башҡорт) тел” уҡыу предметы контексында туған (башҡорт) телде, Рәсәй Федерацияһының тарихын һәм мәҙәниәтен, тыуған яҡтың, Рәсәй халыҡтарының мәҙәниәтен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу белдереү;

– туған (башҡорт) телгә, Тыуған ил – Рәсәй ҡаҙаныштарына, фәнгә, сәнғәткә, хәрби батырлыҡтарға һәм халыҡтың хеҙмәт ҡаҙаныштарына, шул иҫәптән нәфис әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡан күренештәргә иғтибарлы мөнәсәбәт;

– Рәсәй символдарына, дәүләт байрамдарына, тарихи һәм тәбиғи мираҫҡа һәм һәйкәлдәргә, тыуған илдә йәшәгән төрлө халыҡтарҙың йолаларына ихтирам;

***рухи һәм әхлаҡи тәрбиә:***

– эш-ҡылыҡ һайлау мәсьәләһе килеп тыуғанда, әхлаҡи ҡиммәттәргә һәм нормаларға таяныу;

– эш-ҡылығыңды, үҙеңдең тәртибеңде, телмәреңде, шулай уҡ башҡа кешеләрҙең тәртибен һәм ҡылыҡтарын әхлаҡ һәм хоҡуҡ нормаларынан сығып баһаларға әҙер булыу;

*эстетик тәрбиә:*

– төрлө сәнғәт төрҙәренә, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың йолаларына һәм ижадына ҡарата һиҙгерлек;

– туған (башҡорт) телдең коммуникация һәм үҙ-үҙеңде сағылдырыу сараһы буларaҡ әһәмиәтен төшөнөү;

– илебеҙ һәм донъя сәнғәте ҡиммәттәренең, этник мәҙәни йолаларҙың һәм халыҡ ижадының ролен аңлау;

*физик тәрбиә биреү, һаулыҡ һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен булдырыу:*

– тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә таяныу, йәшәүҙең ҡиммәтен аңлау;

– үҙеңдең һаулығына яуаплы ҡараш һәм сәләмәт тормош алып барыуға ынтылыщ (сәләмәт туҡланыу, гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, дөрөҫ йәшәү һәм ял режимы, даими физик әүҙемлек);

– физик һәм психик һаулыҡ өсөн зарарлы ғәҙәттәрҙең (алкоголь, наркотиктар ҡулланыу, тәмәке тартыу) эҙемтәләрен аңлау һәм ҡабул итмәү;

– үҙеңде һәм башҡаларҙы ғәйепләмәйенсә ҡабул итә белеү;

– әҙәби әҫәрҙәргә, шул иҫәптән туған телдә ижад ителгән хеҙмәттәргә таянып, үҙеңдең һәм башҡаларҙың эмоциональ хәлен аңлап, адекват тел саралары ярҙамында үҙеңдең хәл-торошоңдо башҡаларға еткереү;

– рефлексия һәләттәренең формалашҡан булыуы; үҙеңдең һәм башҡаларҙың хаталаныуға хоҡуҡтары булыуын таныу;

*хеҙмәт тәрбиәһе биреү:*

– технологик һәм социаль йүнәлештәге практик бурыстарҙы (ғаилә, мәктәп, ҡала, край сиктәрендә) хәл итеүҙә әүҙем ҡатнашыу, бындай эшмәкәрлекте башлап ебәреү, планлаштырыу һәм үҙ аллы үтәү һәләтенә эйә булыу;

– төрлө һөнәрҙәрҙе һәм хеҙмәтте ғәмәлдә өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, шул иҫәптән, өйрәнелгән предмет буйынса белемде ҡулланыу һәм филологтарҙың, журналистарҙың, яҙыусыларҙың эшмәкәрлеге менән танышыу нигеҙендә алып барыу;

– хеҙмәткә һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәләренә ихтирам;

*экологик тәрбиә:*

– экологик мәҙәниәт кимәлен арттырыу, экологик проблемаларҙың глобаль характерын һәм уларҙы хәл итеү юлдарын аңлау;

– тирә-яҡ мөхиткә зыян килтергән, шул иҫәптән экологик проблемаларҙы күтәргән әҙәби әҫәрҙәр менән танышҡанда барлыҡҡа килгән күренештәрҙе ҡабул итмәү;

– тирә-яҡ мөхиткә зыян килтергән эш-хәрәкәттәрҙе әүҙем ҡабул итмәү

***фәнни танып белеүҙең әһәмиәте:***

– эшмәкәрлектә кеше үҫешенең, тәбиғәттең һәм йәмғиәттең төп закондары, кешенең тәбиғәт һәм социаль мөхит менән үҙ-ара бәйләнеше тураһындағы фәнни фекерҙәр системаһына, тел үҫеше законлылыҡтарына йүнәлеш биреү;

– телмәр һәм уҡыу мәҙәниәтен, донъяны танып белеү сараһы булараҡ уҡыу оҫталығын үҙләштереү;

***уҡыусының социаль һәм тәбиғәт шарттарына яраҡлашыуын тәьмин итеүсе шәхси һөҙөмтәләр:***

– төрлө йүнәлешле төркөмдәрҙә, шул иҫәптән ғаиләлә, һөнәри эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән коллективтарҙа, шулай уҡ башҡа мәҙәни мөхиттәрҙән булған кешеләр менән социаль тәжрибә, төп социаль ролдәрҙе, социаль тәртип нормаларын һәм ҡағиҙәләрен, социаль аралашыу сиктәрендә социаль тормош формаларын үҙләштереү;

– уҡыусыларҙың билдәһеҙлек шарттарында үҙ-ара аралашыуға, тәжрибә алыуға һәм белем туплауға әҙер булыуы;

– стреслы хәлде аңлау, тормош, телмәр һәм уҡыу тәжрибәһенә нигеҙләнгән үҙгәрештәрҙе һәм уларҙың эҙемтәләрен баһалау һәләте; тетрәндергес хәл-торошто сыныҒыу талап иткән ҡаршылыҡтар тип ҡабул итеү;

**Метапредмет һөҙөмтәләр**

5–9-сы кластарҙа “Туған (башҡорт) тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы **универсаль танып белеү** эш-хәрәкәттәрен үҙләштерә.

***Төп логик эш-хәрәкәттәр:***

– лингвистик берәмектәрҙең, лингвистик күренештәрҙең һәм процестарҙың мөһим үҙенсәлектәрен асыҡлау һәм ҡылыҡһырлама биреү;

– тикшерелгән факттарҙың, мәғлүмәттәрҙең һәм күҙәтеүҙәрҙең эҙмә-эҙлелеген һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарын асыҡлау;

– уҡыу барышында ҡуйылған бурыстарҙы хәл итеү өсөн кәрәк булған мәғлүмәтте билдәләү;

– тел процестарын өйрәнеү барышында сәбәп-эҙемтә бәйләнешен асыҡларға; дедуктив һәм индуктив фекерләү, аналогия буйынса фекерләү ярҙамында һығымта яһарға, үҙ-ара бәйләнештәр тураһында гипотезалар булдырыу;

***тикшеренеү эше:***

– һорауҙарҙы танып белеүҙәге төп тикшеренеү ҡоралы булараҡ ҡулланыу;

– ситуацияларҙың ысынбарлыҡҡа һәм көтөлгән торошона тап килмәгәнен асыҡлаған һорауҙарҙы ҡуя белеү, бөгөнгөнө һәм үткәнде үҙ аллы билдәләү һәләтенә эйә булыу;

– үҙ фекереңдең һәм башҡаларҙың ҡарашы дөрөҫ булыуына гипотеза төҙөү, үҙ ҡарашыңды һәм фекереңде нигеҙләү;

– мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн һәм ҡулланыу уңайлығын баһалау;

***мәғлүмәт менән эш:***

– текстарҙа, таблицаларҙа, схемаларҙа бирелгән мәғлүмәтте һайлап алыу, анализлау, аңлатыу, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу;

– текст һәм унда бирелгән мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тура килеүен баһалау һәм белем биреү бурыстарын хәл итеү мөмкинлеге йәһәтенән һөйләүҙең һәм уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланыу;

– кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу, дөйөмләштереү өсөн һәм ҡуйылған маҡсатты иҫәпкә алып, бер йәки бер нисә сығанаҡтан мәғлүмәтте системалаштырыу өсөн мәғәнәле уҡыуҙы ҡулланыу;

– төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарынан оҡшаш фекерҙәрҙе табыу (бер үк уй-фекерҙе, фаразды раҫлаған йә кире ҡаҡҡан);

“Туған (башҡорт) тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә 5–9-сы класс уҡыусылары универсаль **коммуникатив** уҡыу эш-хәрәкәттәрен үҙләштерә.

***Аралашыу:***

– фекерҙе аңлау һәм аныҡ итеп әйтергә, эмоцияларҙы аралашыу шарттарына һәм маҡсаттарына ярашлы сағылдырырға; үҙ ҡарашыңды фекер алышыу барышында диалог аша ла, телдән монолог рәүешендә лә, яҙма текста ла белдерә алыу;

– телдән тыш аралашыу сараларын билдәләй алырға һәм асыҡларға, социаль тамғаларҙың әһәмиәтен аңлау;

– бәхәсле ситуацияларҙы алдан танып белеү һәм уларҙы еңелләштереү, һөйләшеүҙәр алып барыу;

– башҡаларҙың уй-ниәтен аңлау, әңгәмәлә ҡатнашыусыларға ҡарата хөрмәт күрһәтеү һәм килешмәгәнеңде әҙәпле еткерә белеү;

– диалог/дискуссия барышында тема буйынса ғына һорауҙар биреү һәм мәсьәләләрҙе хәл итеүгә һәм аралашыуҙың яҡшы барыуын һаҡлауға йүнәлтелгән идеялар тәҡдим итеү

***уртаҡ эшмәкәрлек:***

– конкрет проблеманы хәл итеүҙә индивидуаль һәм команда менән эшләү өҫтөнлөктәрен аңлау һәм ҡуллана белеү, ҡуйылған бурыстарҙы хәл итеүҙә төркөмдәрҙең бәйләнешле хәрәкәт зарурлығын нигеҙләү;

– берлектәге эшмәкәрлек маҡсаттарын ҡабул итеү, бергә план ҡороу һәм уның буйынса һөҙөмтәләргә өлгәшеү: ролдәр бүлеү, килешеү, берлектәге эш барышы һәм уның һөҙөмтәләре тураһында әңгәмәләшеү;

– бер нисә кешенең фекерен дөйөмләштерә белеү, етәкселек итергә әҙер булыу, ҡушылған эштәрҙе үтәү, буйһоноу;

“Туған (башҡорт) тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә 5–9-сы класс уҡыусылары универсаль **регулятив** уҡыу эш-хәрәкәттәрен үҙләштерә.

***Үҙеңде ойоштороу:***

– уҡыу һәм тормош ситуацияларына бәйле хәл ителәсәк  проблемаларҙы билдәләү;

– ҡарарҙар ҡабул итеүҙә төрлө йүнәлештәге фекерҙәрҙе иҫәпкә алыу (индивидуаль, төркөм менән ҡарар ҡабул итеү, төркөм эсендә ҡарар ҡабул итеү);

***үҙ-үҙеңде контролдә тотоу***:

– уҡыу барышында килеп тыуған ауырлыҡтарҙы күрә белеү, бурыстарҙы килеп тыған шарттарға ярашлы үҙгәртеүҙәр индереү;

– эшмәкәрлек һөҙөмтәләренең килеп сығыу йәки сыҡмау сәбәптәрен аңлатыу;

***эмоциональ интеллект***:

– үҙеңдең һәм башҡаларҙың хис-тойғолары менән идара итеү һәләттәренә эйә булыу;

***үҙеңде һәм башҡаларҙы аңлау, ҡабул итеү:***

– икенсе кешегә һәм уның уй-ҡараштарына аңлы ҡараш булдырыу;

– үҙеңдең һәм башҡаларҙың хаталанырға хоҡуғын таныу;

– үҙеңде һәм башҡаларҙы ғәйепләмәй ҡабул итеү;

– асыҡ йөҙ күрһәтеү;

– бөтә тирә-яҡ мөхитте контролдә тотоп булмауын аңлау.

## Предмет һөҙөмтәләре

“Туған (башҡорт) тел” предметының 5–9-сы кластарҙа өйрәнеү һөҙөмтәләре түбәндәгеләр:

– рәсми йәки рәсми булмаған шәхес-ара һәм мәҙәни-ара аралашыуҙарҙың һөҙөмтәле булыуын тәьмин итеүсе телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен камиллаштырыу (тыңлау, уҡыу, һөйләшеү һәм яҙыу);

– белем биреү һәм үҙ аллы белем алыу барышында туған (башҡорт) телдең шәхестең интеллектуаль үҫешендә төп урын алып тороуын аңлау;

– туған (башҡорт) телдең коммуникатив-эстетик мөмкинлектәрен ҡулланыу;

– һүҙгә төрлө лингвистик анализ яһау (фонетик, лексик, морфематик, һүҙьяһалыш, морфологик), шул иҫәптән һүҙбәйләнешкә синтаксик һәм текстҡа күп яҡлы анализ яһау һәләттәрен формалаштырыу – туған (башҡорт) телдең төп лексик һәм фразеологик стиль ресурстарын, туған (башҡорт) телдең төп нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, пунктуацион) һәм телмәр этикеты нормаларын үҙләштереү; һөйләү һәм яҙма телмәр төҙөгәндә уларҙы практикала ҡулланыу өсөн тәжрибә туплау; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

– дөйөм кешелек ҡиммәте булараҡ тел мәҙәниәте өсөн яуаплылыҡты формалаштырыу.

**Кластар буйынса предмет һөҙөмтәләре**

**5-се класс**

Уҡыусы өйрәнәсәк:

– башҡорт халҡының мәҙәниәтен һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлауҙа башҡорт теленең ролен характерларға;

– башҡорт әҙәби теле нормаларын үҙләштереү юлы аша коммуникатив һәләттәрен камиллаштырырға;

– башҡорт телендәге баҫым үҙенсәлектәрен белергә, миҫалдар килтерергә, рус теле менән сағыштырырға;

– текста фразеологик берәмектәрҙе таба белергә, мәғәнәһен аңларға һәм бәйләнешле телмәрҙә ҡулланырға;

– монолог, диалог һәм полилог үҙенсәлектәрен белергә, уларҙы телмәр эшмәкәрлегендә ҡулланырға;

– башҡорт теленә ҡәрҙәш башҡа төрки телдәрҙе таный белергә;

– башҡорт теленең лексик составын характерларға; төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәрен һәм сит тел һүҙҙәрен билдәләргә;

– синонимдарҙы, антонимдарҙы һәм омонимдарҙы текста таба белергә, һөйләү һәм яҙма телмәрҙә уларҙың башҡарған функцияларын аңлатырға;

– башҡорт теленең үҙенсәлекле тартынҡы өндәрен билдәләргә, уларҙы һөйләү телмәрендә дөрөҫ әйтә белергә;

– башҡорт алфавитын һәм уның килеп сығышын белергә, рус алфавиты менән сағыштырырға;

– үҙ аллы һүҙ төркөмө булараҡ исемдәргә ҡылыҡһырлама бирергә; текста яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе айырырға, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға;

– башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһын күҙалларға; һүҙҙең тамырын һәм ялғауҙарын билдәләргә; һүҙҙең төҙөлөшөндә һүҙ үҙгәртеүсе, форма яһаусы һәм һүҙ яһаусы аффикстарҙы билдәләргә;

– башҡорт телендә һүҙьяһалыш юлдары тураһында дөйөм төшөнсә алырға; ҡушма һүҙҙәрҙе билдәләргә, уларҙың дөрөҫ яҙылышын белергә.

## 6-сы класс

Уҡыусы өйрәнәсәк:

– телдән текст төҙөгәндә һәм коммуникатив бурыстарҙы хәл иткәндә башҡорт теленең орфоэпик нормаларын һаҡларға;

– Башҡортостандың ономастик системаһын күҙ алдына килтерергә; төбәктең топонимияһы буйынса мәғлүмәтле булырға, билдәле топонимдарҙың географияһын белергә; башҡорт һәм рус телдәрендә топонимдарҙы дөрөҫ яҙа белергә;

– башҡорт телендәге баҫым үҙенсәлектәрен аңлатырға, ҡушма һүҙ төҙөлөшөндә һәм һорау алмаштарында ялғауҙар ҡушылыу һөҙөмтәһендә күҙәтелгән күренештәргә комментарий бирергә;

– исемдең төп билдәләрен белергә, уларҙың килеш формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға; башҡорт һәм рус телдәрендәге килеш формаларын сағыштырырға;

– хәрби һәм тарихи тематикалы текстарҙа иҫкергән һүҙҙәрҙе, хәрби лексиканы, фразеологик берәмектәрҙе асыҡларға.

## 7-се класс

**Уҡыусы өйрәнәсәк:**

– омонимия һәм паронимия күренештәрен асыҡларға: омонимдарҙың төрҙәрен айырырға, уларҙы яҙма һәм  һөйләү телмәрендә ҡулланырға;

– паронимдарҙың лингвистик тәбиғәтен билдәләргә, уларҙы текста урынлы ҡулланырға;

– паронимдарҙың мәғәнәүи төрлөлөгөн, лексик характер ярашлылығын, идара итеү алымдарын, функциональ-стиль йөкмәткеһен анализларға;

– традицион башҡорт һөйләшеү манераһын һаҡларға;

– аралашыуҙа ҡәтғилекте ҡулланмаҫҡа; вербаль булмаған (һүҙһеҙ) аралашыуҙың этикетын белергә;

– башҡорт теленең фонетик системаһын, һүҙьяһалышын һәм морфологияһын характерларға; һүҙҙәрҙең һүҙ төркөмөнә бүлеү критерийҙарын белергә;

– исемдәрҙең үҙгәрешен анализларға; текста һандарҙы дөрөҫ яҙыу нормаларына ярашлы ҡулланырға;

– ҡылымды үҙ аллы һүҙ төркөмө булараҡ ҡылыҡһырларға; эйәле һәм эйәһеҙ ҡылымдарҙы, үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы танырға;

– ҡылым һөйкәлештәрен ҡылыҡһырларға: коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн уларҙы телмәрҙә ҡулланырға;

– текста ҡылым төркөмсәләрен асыҡларға, уларҙың айырмалы билдәләрен күрһәтергә, ҡылым төркөмсәләрен һәм башҡа һүҙ төркөмдәрен айырырға;

– рәүеште һүҙ төркөмө булараҡ ҡылыҡһырларға, рәүеш төрҙәрен асыҡларға;

– ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең функцияһын аңлатырға; ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен грамматик һәм лексик мәғәнәләренә ярашлы ҡулланырға;

– проект (тикшеренеү) эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе булараҡ текстарҙы булдырырға; проект (тикшеренеү) һөҙөмтәләрен рәсмиләштерергә, уны телдән һәм яҙма формала күрһәтергә.

## 8-се класс

**Уҡыусы өйрәнәсәк:**

– хәҙерге башҡорт әҙәби теленең төп орфоэпик нормаларына аңлатма бирергә, хәҙерге телмәрҙә төп орфоэпик хаталарҙы күрә белергә, һүҙҙәрҙе орфоэпик нормаларҙың әйтелеш һәм стилистик варианттары менән ҡулланырға;

– хәҙерге башҡорт телендәге төп башҡорт һүҙҙәренең, рус, ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең әйтелешендәге актив процестарҙы күҙ алдына килтерергә;

– синонимияны характерларға, текста синонимик рәттәрҙе табырға, синонимдар һүҙлеген файҙаланырға, лексик мәғәнәһенә ҡарап, синонимдарҙы телмәрҙә ҡулланырға;

– башҡорт милли телмәр этикеты нигеҙендә ятҡан аралашыу этикеты принциптарын файҙаланырға, башҡорт милли этикетын дөрөҫ ҡулланырға;

– ябай һөйләм синтаксисын характерларға, текста бирелгән интонация һәм әйтелеү маҡсаты буйынса ябай һөйләм төрҙәрен билдәләй белергә (хәбәр һөйләм, һорау һөйләм, бойороҡ-өндәү һөйләм);

– текста һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнеү юлдарын айыра белергә (теҙмә һәм эйәртеүле), һөйләмдә һүҙҙәрҙең синтаксик бәйләнеш төрҙәрен күрһәтергә (ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү), башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙҙәрҙең бәйләнеш төрҙәрен сағыштырырға;

– башҡорт телендәге һөйләм төҙөлөшөн характерларға, баш киҫәктәрҙе айырырға, башҡорт һәм рус телдәрендә һөйләмдәрҙәге һүҙ тәртибен анализларға;

– һөйләмдә эйәрсән киҫәктәрҙе билдәләргә, тиң һәм тиң булмағандарын күрһәтергә, уларҙың функциональ үҙенсәлектәрен анализларға, функцияларына ярашлы һөйләмдә эйәрсән киҫәктәрҙе ҡулланырға;

– бер составлы һәм ике составлы һөйләмдәрҙе, тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәрҙе сағыштырырға, белем алыу бурыстарын хәл итеү маҡсатынан уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланырға;

– бер составлы һөйләм төрҙәрен ҡылыҡһырларға (билдәле, билдәһеҙ эйәле, дөйөм эйәле, эйәһеҙ, атама), диалог, тура телмәр һәм ситләтелгән телмәр төҙөү барышында уларҙы ҡулланырға;

– проект (тикшеренеү) эшенең һөҙөмтәһе булараҡ текст төҙөргә, проекттың (тикшеренеү эшенең) һөҙөмтәһен телдән һәм яҙма формала тормошҡа ашырырға.

## 9-сы класс

**Уҡыусы өйрәнәсәк:**

– телмәр хаталарын таба белергә һәм хаталанмаҫҡа, сит кешенең һәм үҙ телмәреңде хәҙерге башҡорт теле нормалары күҙлегенән анализларға һәм баһаларға, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нормаларына таянып, телмәргә төҙәтмә индерергә;

– милли аралашыу нигеҙендә ятҡан аралашыу традицияларын, этикет формаларын һәм нығынған формулаларҙы интернет селтәрендә аралашыуҙа ҡулланырға, махсус аралашыу барышында башҡорт этикетын һаҡларға;

– телефон һәм интернет аша аралашыу этикетын үтәргә;

– башҡорт теленең функциональ стилдәрен күҙалларға, уларҙың коммуникатив үҙенсәлектәрен күрһәтергә;

– тексттың төп билдәләрен һәм функцияларын аңлатырға, тексттың типтарын айырырға;

– телмәрҙә интонацияның ролен характерларға, коммуникацияның маҡсаты һәм бурыстарына ярашлы интонацияның төрҙәрен дөрөҫ табырға;

– башҡорт теленең лингвистик һүҙлектәрен ҡулланырға, ономастик һүҙлектәргә комментарий бирергә, уларҙың функцияларын һәм үҙенсәлектәрен күрһәтергә;

– башҡорт һөйләү теленең территориаль үҙенсәлектәрен танырға, уларҙың билдәләрен айырырға;

– ҡушма һөйләм синтаксисын характерларға, башҡорт нәфис әҙәбиәте текстарында эйәртеүле, теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе таба белергә;

– эйәртеүле һөйләмдәрҙең үҙенсәлектәренә комментарий бирергә, эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәрен табырға, башҡорт телендәге ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙы анализларға һәм башҡорт теленең нормаларына ярашлы уларҙы телмәрҙә ҡулланырға;

– проект (тикшеренеү) эшмәкәрләге һөҙөмтәһе булараҡ текст төҙөргә, проекттың (тикшеренеү эшенең) һөҙөмтәһен эшләргә, һөйләү һәм яҙма формала күрһәтергә.

5-се А классы туған башҡорт теле аҙнаһына 2сәғ.

| № | Дәрес темалары | сәғ һаны | үтк. ваҡыты | фактик дата | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Үтелгәндәрҫе ҡабатлау дәресе 8с | 1 | | | |
| 2 | Башҡорт теленең телмәр өндәре | 1 | | | |
| 3 | Фонетика | 1 | | | |
| 4 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр | 1 | | | |
| 5 | Морфология . Исем | 1 | | | |
| 6 | Исемдең грамматик категориялары | 1 | | | |
| 7 | Килештәр | 1 | | | |
| 8 | Ҡылым Ҡылымдың. бойороҡ һөйкәлеше. | 1 | | | |
| 9 | Һөйләм. Эйә һәм хәбәр. | 1 | | | |
| 10 | Инеш диктант (75 һүҙ). | 1 | | | |
| 11 | Хаталар өҫтөндә эш дәресе | 1 | | | |
| 12 | Төрки телдәр араһында башҡорт теле. | 1 | | | |
| 13 | Төрки телдәр ғаиләһе | 1 | | | |
| 14 | Лексика Синонимдар. Синонимдар тураһында төшөнсә. | 1 | | | |
| 15 | Антонимдар. Антонимдар тураһында төшөнсә | 1 | | | |
| 16 | Башҡорт теленең лексик составы. | 1 | | | |
| 17 | Төп башҡорт һүҙҙәре | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. | | | | |
| 18 | Башҡорт теленең фразеологизмдары. | 1 | | | |
| 19 | Фразеологик берәмектәрҙең билдәләре. | 1 | | | |
| 20 | Контроль диктант | 1 | | | |
| 21 | Хаталар өҫтөндә эш дәресе | 1 | | | |
| 22 | Башҡорт теленең тартынҡы өндәре. | 1 | | | |
| 23 | Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре. | 1 | | | |
| 24 | Ижек. | 1 | | | |
| 25 | Баҫым. | 1 | | | |
| 26 | Өндәрҙең һүҙ составында үҙгәреше. | 1 | | | |
| 27 | Сингармонизм законы. | 1 | | | |
| 28 | Фонетик анализ өлгөһө | 1 | | | |
| 29 | Текст өҫтөндә эшләргә өйрәнеү | 1 | | | |
| 30 | Башҡорт алфавитының тарихы. | 1 | | | |
| 31 | Башҡорт алфавиты сығанағы. | 1 | | | |
| 32 | Исем. | 1 | | | |
| 33 | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 1 | | | |
| 34 | Сифат. | 1 | | | |
| 35 | Төп сифаттар. Шартлы сифаттар | 1 | | | |
| 36 | Сифат дәрәжәләре | 1 | | | |
| 37 | Сифатҡа морфологик | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | анализ тәртибе | | | | |
| 38 | Ҡылым | 1 | | | |
| 39 | Ҡылымдың замандары | 1 | | | |
| 40 | Ҡылым һөйкәлештәре | 1 | | | |
| 41 | Ҡылымдарҙың зат менән үҙгәреше | 1 | | | |
| 42 | Биремле диктант | 1 | | | |
| 43 | Хаталар өҫтөндә эш дәресе | 1 | | | |
| 44 | Һан Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 | | | |
| 45 | Һан төркөмсәләре | 1 | | | |
| 46 | Рәүеш | 1 | | | |
| 47 | Ҡабатлау дәресе | 1 | | | |
| 48 | Һүҙзең тамыры. Һүҙзең нигеҙе | 1 | | | |
| 49 | Ялғау. Ялғау төрҙәре: | 1 | | | |
| 50 | Һүҙьяһалыш юлдары. | 1 | | | |
| 51 | Ҡушма һүҙҙәр.Уларҙың яһалышы. | 1 | | | |
| 52 | Теркәүес | 1 | | | |
| 53 | Бәйләүес | 1 | | | |
| 54 | Киҫәксә | 1 | | | |
| 55 | Ымлыҡтар | 1 | | | |
| 56 | Текст өҫтөндә эш | 1 | | | |
| 57 | Текст өҫтөндә эш | 1 | | | |
| 58 | Текст өҫтөндә эш | 1 | | | |
| 59 | Йыллыҡ диктант | 1 | | | |
| 60 | Хаталар өҫтөндә эш дәресе | 1 | | | |
| 61 | Ҡабатлау дәресе | 1 | | | |
| 62 | Урманға экскурсия | 1 | | | |
| 63 | Телмәр үҫтереү дәресе | 1 | | | |
| 64 | Һүҙ төркөмдәрен ҡабатлау дәресе | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 65 | Һүҙ төркөмдәрен ҡабатлау дәресе | | | | |
| 66 | Һөйләмгә синтаксик анализ эшләүҙе ҡабатлау | | | | |
| 67 | Ҡабатлау дәресе | | | | |
| 68 | Йомғаҡлау дәресе | | | | |

ҠУШЫМТА 1

***5 класс***

Контроль эштәр өсөн материалдар

Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В..Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5-9 синыф уҡыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө, “Китап”,2001.-256 бит.

**Диктант №1 ”Көҙ етте”14 бит**

Йәмле йәй үтте. Тәбиғәттә көҙ билдәләре күберәк күренә башланы. Болондар ҙа , яландар ҙа үҙҙәренең йәшел төҫтәрен юғалттылар. Буш ҡалған иген баҫыуҙары ла көҙ башланыуы тураһында хәбәр итә.

Ағастарҙа һары япраҡтар күбәйҙе. Ҡоштар ҙа һайрауҙан туҡтаны. Ҡара ҡарлуғастар һәм торналар йылы яҡтарға осоп киттеләр.

Беҙҙе соғап алған тәбиғәт көндән-көн үҙгәрә бара.(50 һүҙ) Е.Кучеров б-са)

1. Исем ҡушығыҙ.

2.Ҡалын һуҙынҡылы һәм нәҙек һуҙынҡылы 2-шәр һүҙ яҙығыҙ.

**Диктант №2 “Ҡара айғыр”36-37 бб**

Йәғәфәргә ун өс йәш ине.Уның хыялын Ыласын исемле йәш дыуамал ҡара айғыр биләне.

Аҙбарҙа кеше юҡ саҡта малай Ыласынға иркә һүҙҙәр менән өндәшә.

Көндәр үтә торҙо, Йәғәфәр ҙә ҡыйыулана төштө. Бер ваҡыт ул ҡапҡа аша үрелде лә айғырҙың муйынынан һыйпаны. Ыласын күҙенең ағын әйләндереп ҡараны ла яй ғына ашауында булды. Малай уғата батырланды,кеҫәһенән тоҙ һипкән икмәк алды ла айғырға һондо. Малҡай икмәкте еҫкәгәндәй итте, әҙ генә аптырап торҙо ла ашай башланы.

Бынан һуң Йәғәфәрҙең кеҫәһенән икмәк өҙөлмәне. Аҙбар саҡ ҡына һил булдымы, ул шунда ашыҡты,айғырҙы һөйҙө, уның бесәнен рәтләне. Ыласын да малайҙы ҡәнәғәт тауыш биреп ҡаршылай башланы.

**Диктант № 3 “Әсә шатлығы” 69 бит**

Мин ун бер йәштәрҙә булғанмындыр, яңы ғына уҡыуҙан ҡайтҡайным.

- Балам, бар, килтер әле таныҡлығыңды!- тине әсәй.

Мин быны сабырһыҙлыҡ менән көтә инем. Урынымдан нисек һикереп торғанымды белмәйем.

Алтын хәрефтәр менән яҙылған ҡиммәтле ҡағыҙҙы әсәйемә килтереп бирҙем. Был – мәктәпте тамамлауым тураһында таныҡлыҡ ине.

Билдәләр оялтырлыҡ түгел, бөтәһе лә “бишле”. Был – минең өсөн әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур бәхет ине. Таныҡлығымды мең тапҡыр уҡығанмын, унда ни барын яттан беләм. Шулай ҙа уны әсәйем ауыҙынан ишетке килә.” Ни тиһең, әсәй, яраймы?”тигән ҡараш менән күҙҙәренә текәлдем. Яуап көтәм. Ул һалмаҡ ҡына күҙ йөрөтөп сыҡты ла:
-Рәхмәт, балам, рәхмәт, күҙ нурым, тырышҡанһың,- тине.

**Диктант № 4 ”Дуҫтар” 12 бит**

Борис менән Камал утрауҙа үҙҙәре генә ҡалған. Улар нимә тураһындалыр шым ғына һөйләшә.

Был утрау бер юғала, бер һыу аҫтынан ҡалҡып сыға. Уға ситке урам малйҙары хужа. Бында улар ниндәй генә серҙәр серләшмәй, ниндәй негә уйындар уйнамай! Йә бәһлеүән, йә партизандар командиры, һис юғында шәфҡәтле атаман булалар. Ошонда ғына Азаматтың өс тапҡыр Чапай, бер тапҡыр Пугач булғаны бар. Ә Салауат булған маҡтың инде иҫәбе лә, һаны ла юҡ.

Малайҙар һөйләшеп туйҙылар ҙа һыу инергә тотондолар. Шунда улар төҫө ҡасҡан Азаматты күрҙеләр. Уға ни булған?

**Диктант №5 Кемдәр шатлана? (69 -70 бит)**

Бер ваҡыт Йәмлиха яман сыйылдашып осҡан ҡарлуғастарға иғтибар итә ҡалды. Ҡыйыҡҡа күҙе төштө. Унда күршеләренең оло бесәйе! Йәмлихә йүгереп килде, һөйәп ҡуйылған ҡолғаны эләктерҙе лә ҡараҡ бесәйгә ташланды.Бик ҡаты һелтәнеп йүгерҙе, ләкин бесәй етеҙерәк булып сыҡты. Әммә уның шул һелтәүеәллә күпме ҡыуаныс тыуҙырҙы, сөнки күктәә – ҡарлуғастар, ерҙә әсәһенең итәгенә тағылып йөрөгән малай шатланды.

Бына ул көйәнтә- биҙрәләрен алды ла һыуға китте.Йәмлихаатлай, уның алдында ғына ҡарлуғастар осоп бара.

Улар уны ҡоҙоҡҡа тиклем оҙата барҙылар. Бына Йәмлиха һыу алды, ә ҡарлуғастар уның баш осонда әйләнеп торҙолар, бөтмәҫ- төкәнмәҫ шатлыҡтарын һөйләй – һөйләй, серләшеп бергә ҡайттылар.

**Башҡорт теле 8 класс-аҙнаһына 2 сәғ**

| № | Дәрес темалары Башҡорт теле 8 класс | Сәғ һаны | Үткәреү ваҡыты 8Б | Үткәреү ваҡыты 8а | иҫкәрмә | Өйгә эш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | 6.09 | 5.09 | | Фонетиканы ҡабатлау |
| 2 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | | | | | |
| 3 | Ябай һөйләм синтаксисы | 1 | 13.09 | 12.09 | | 3-сө күн 14-се бит |
| 4 | Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм | 1 | 20.09 | 19.09 | | Миҫалдар яҙырға |
| 5 | Һөйләм | 1 | | | | |
| 6 | Интонация буйынса һөйләм төрҙәре | 1 | 27.09 | 26.09 | | 5-се күнегеү тәржемә итергә17-се бит |
| 7 | Һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнеше -18-се бит | | | | | |
| 8 | Һүҙҙәрҙең һөйләмдә бәйләнеү юлдары-26сы бит | 1 | 4.10 | 3.10 | | 19-сы бит 9-сы күнегеү |
| 9 | Ярашыу | 1 | 18.10 | 10.10 | | Миҫалдар яҙ. |
| 10 | Башҡарылыу | 1 | | | | |
| 11 | Йәнәшәлек | 1 | | | | |
| 12 | Һөйкәлеү | 1 | | | | |
| 13 | Үҙ аллы эш | 1 | 25.10 | 17.10 | | Ҡабатларға һүҙбәйләнештәрҙе |
| 14 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 | 8.11 | 24.10 | | юҡ |
| 15 | Һөйләмдеү баш һәм эйәрсән кисәктәре. Эйә менән хәбәр | 1 | 15.11 | 7.11 | | Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 | Эйә менән хәбәр | 1 | | | | |
| 17 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы | 1 | 22.11 | 14.11 | | Аныҡлаусылар булған һөйләмдәр яҙып килергә |
| 18 | Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар | 1 | 29.11 | 21.11 | | Тиң булмаған аныҡлаусылар булған 3һөйләм яҙып килергә |
| 19 | Изложение. Командир | 1 | 6.12 | 28.11 | | Дәфтәргә күсереп яҙырға |
| 20 | Хаталар буйынса эш.Ҡабатлау | 1 | 13.12 | 5.12 | | |
| 21 | Тултырыусы Тура һәм ситлтелгән тултырыусылар | 1 | 20.12 | 19.12 | | Ситләтелгән тултырыусылар менән3 һөләм яҙырға |
| 22 | Тура һәм ситлтелгән тултырыусылар | 1 | | | | |
| 23 | Хәлдәр. Уларҙың төрҙәре. | 1 | 27.11 | 19.12 | | Һәр бер хәл төрөнә художестволы әҫәрҙән миҫал табып яҙып килтерергә |
| 24 | Рәүеш хәле Урын хәле. Ваҡыт хәле | 1 | 17.01 | 26.12 | | Урын хәле менән һөйләмдәр яҙ |
| 25 | Урын хәле. | 1 | | | | |
| 26 | Ваҡыт хәле | 1 | | | | |
| 27 | Маҡсат һәм сәбәп хәлдәре Ваҡыт хәле | 1 | 24.01 | 16.01 | | Сәбәп хәленә миҫалдар яҙ. |
| 28 | Күләм – дәрәжә хәлдәре | 1 | | | | |
| 29 | Шарт хәле | 1 | | | | |
| 30 | Кире хәлдәр | 1 | | | | |
| 31 | Контроль диктант. Яҙғы тантана. | 1 | 31.01 | 23.01 | | Юҡ |
| 32 | Хаталар буйынса эш. | 1 | 7.02 | 30.01 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Ҡабатлау | | | | | |
| 33 | Күләм – дәрәжә хәлдәре | 1 | 15.02 | 6.02 | | Шарт хәле. Кире хәл |
| 34 | Синтаксик анализ тәртибе | 1 | 22.02 | 13.02 | | |
| 35 | Синтаксик анализ тәртибе | 1 | | | | |
| 36 | Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 1 | 7.03 | 20.02 | | Инша. һуғыш һәм йәш ғүмерҙәр |
| 37 | Дөйөмлштереүсе һүҙҙәр | 1 | 14.03 | 27.02 | | Күнегеүҙе эшләп бөтөргә |
| 38 | Изложение. Мишка. | 1 | 21.03 | 6.03 | | |
| 39 | Хаталар өҫтөндә эш дәресе | 1 | | | | |
| 40 | Бер составлы һөйләмдәр һөйләмдәр | 1 | 4.04 | 13.03 | | Бер составлы 5 һөйләм төҙөп яҙырға |
| 41 | Ике составлы һөйләмдәр | 1 | 11.04 | 20.03 | | Инша. Ихтирамға лайыҡ кешеләрем |
| 42 | Билдәле эйәле һөйләм | 1 | 18.04 | 3.04 | | Билдәле эйәле һөләмдәр табырға |
| 43 | Дөйөм эйәле һөйләм | 1 | | | | |
| 44 | Билдәһеҙ эйәле һөйләм | 1 | | | | |
| 45 | Эйәһеҙ һөйләм | 1 | | | | |
| 46 | Атама һөйләмдәр | 1 | 25.04 | 10.04 | | Эйәһеҙ һөйләмдәргә миҫалдар яҙырға |
| 47 | Ҡабатлау дәресе | 1 | 2.05 | 17.04 | | 2тулы,2кәм һөйләм яҙырға |
| 48 | Тулы һәм кәм һөйләмдәр | | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 49 | Бер һəм ике составлы һөйлəмдəр темаһы нығытыу дəресе | 1 | 16.05 | 24.04 | | юҡ |
| 50 | Контроль диктант. «Көньяҡ Уралдағы йылғалар»1 | 1 | 16.05 | 8.05 | | |
| 51 | Айырымланыу тураһында төшөнсə | 1 | 23.05 | 15.05 | | Өндəш һүҙҙəр Улар эргəһендəтыныштбилдəлəре |
| 52 | Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы | | | | | |
| 53 | Хəл əйтемдəре һəм улаҙың айырымланыуы | 1 | 23.05 | 22.05 | | Инешһүҙ һəм инеш һүҙбəйлəнештəр |
| 54 | Өҫлмəлектəрҙең айырымланыуы | 1 | | | | |
| 55 | Ябай һөйлəм синтаксисы буйынса үтелгəндəрҙе ҡабатлау | 1 | 30.05 | 29.05 | | |
| 56 | Текст өҫтөндə эш | 1 | | | | |
| 57 | Хаталар өҫтөндə эш дəресе | 1 | | | | |
| 58 | Өндəш һүҙҙəр | 1 | | | | |
| 59 | Инеш һүҙ һəм инеш һүҙбəйлəнештəр | 1 | | | | |
| 60 | Йыллыҡ диктант | 1 | | | | |
| 61 | Хаталар ҡҫтөндə эш дəресе | 1 | | | | |
| 62 | Тура һəм ситлəтелгəн телмəр | 1 | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 63 | Тура телмәрҙә тыныш билдәләре | 1 | | | | |
| 64 | Тура телмәрҙә тыныш билдәләре | 1 | | | | |
| 65 | Ситләтелгән телмәрҙә тыныш билдәләре | 1 | | | | |
| 66 | Диалог | 1 | | | | |
| 67 | Ҡабатлау дәресе | 1 | | | | |
| 68 | Йомғаҡлау дәресе | 1 | | | | |

ҠУШЫМТА 1

Контроль эштәр өсөн материалдар
Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В..Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5-9 синыф уҡыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө, “Китап”,2001.-256 бит.

**8 класс**

**Диктант № 1“Урман – тыуған төйәк”**

Беҙҙең ауылды итәктәрендә ялбыр ҡайындар, түбәләрендә һырғый ҡарағайҙар үҫкән тауҙар уратып алған. Йәй көнө бөҙрә йәшеллеккә күмелеп ултырған ҡайындар ҡышҡы һыуыҡтарҙа ап-аҡ бәҫ, ә буран мәлдәрендә ҡалын боҙлауыҡ менән ҡаплана. Ҡарағайҙар иһә йәйге эҫегә лә, көҙгө ҡырауға ла, ҡышҡы сатлама һыуыҡтарға ла бирешмәй, һәр саҡ йәшел, гелән мәғрур.
Төрлө йәнлектәргә ғәжәп бай ул беҙҙең тау-урмандар. Унда сығып йөрөгәнеңдә лапы аҫтынан тоҡор ҡуян сығып ҡасҡанын әй һонтор ҡойроҡло төлкө үтеп киткәнен күрергә мөмкин. Ҡарағай баштарында тейендәр ҙә, йүкәлек йә имәнлектә һуҫарҙар ҙа бар. Урман шырлығында бүреләр ҙә осрай, ғорур мышылар ҙа юлға килеп сыға. Ҡарағайлыҡта – һуйырҙар, ҡайын урманында яҡын-тирәлә ҡорҙар ҡаптырлашып оса. Һунарға сыҡтыңмы, һис юғында берәй ҡош-ҡорт атып алып ҡайтаһың (Н.Мусин)

***Контроль диктант № 2 ” Музыкант”***

Өй эсендәмоң ағылды. Ҡурай тауышына ла, гармун телдәренең сыңлауына ла оҡшамағайны ул. Разыя инәй берсә көмөш тәңкәләрҙең бергәләшеп зыңғылдауын, берсә тамсыларҙың ҡыйыҡ баштарынан, ағас ботаҡтарынан суп-суп итеп ергә тамған тауышын ишетте.
Өйгә килеп ингәндә, бик йәлләүес күренгән, ҡарпыш ҡолаҡлы, һипкелле малай ҙа хәҙер икенсе ине. Ҡояшҡа бәбәктәрен асҡан мәк сәскәһендә алһыу йөҙөндә, саф ямғыр тамсыһындай мөлдөрәгән ҡара күҙҙәрендә, әле генә уйнауҙан туҡтаған нәҙек оҙон бармаҡтарында баяғы моң шаңдауы сыңлай һымаҡ тойолдо.
Айсыуаҡ, эргәһендә музыканы ихлас тыңлаған һәйбәт кеше ултырғанға, туктау белмәй уйнаны. Ул байып барған ҡояштың һуңғы нурҙарына ҡараштарын текләгән дә ҡолас йәйеп уйнай. Айсыуаҡ алға эйелһә, эргәһендә ултырған Разыя инәй ҙә алға эйелә. Айсыуаҡ ҡалҡынһа, ул да ҡалҡына. Ейәненең уйнауын бирелеп тыңлай. (Ш.Насиров.)147 бит.

**Контроль диктант № 3 “Ҡышлаусы ҡоштар”**
Ҡыш. Бөтә ерҙә ап-аҡ ҡар һырынтылары. Урман тып-тын, ул уйға сумған төҫлө. Ҡар аҫтында һығылған ағастар әкиәттәге кеүек булып ҡалғандар.
Ғинуар беҙҙең яҡта бик ҡаты була. Һалҡындар хатта 40 градустан да уҙып киткеләй. Ыжғыр буранлы көндәр күп. Ел һыҙғыра, олой, ҡоторона, ләкин ул ҡапыл туҡтай. Һыуыҡ йомшара, тағы ла тынлыҡ урынлаша.
Тәжрибәле натуралист һәр саҡ ҡарҙа ҡышҡы йән эйәләренең эҙҙәрен таба. Бына ҡар өҫтөндә дегәнәк баштары туҙҙырылған, бында ҡарабаш турғайҙар ем эҙләгән.
Сел, һуйыр, ҡор кеүек ҡоштар сатлама һыуыҡтар үткәнен тәрән ҡар эсендә көтәләр. Тик һайыҫҡан, ҡарға, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарға бирешмәйҙәр, улар кеше йәшәгән урындарға яҡыныраҡ киләләр. Сөнки бында аҙыҡ табыуы еңелерәк уларға. Поляр өкөһө төньяҡта йәшәй, ә ҡышын беҙгә күсеп килә.
Башҡортостанда 70-тән артыҡ ҡош ҡышлай. Һеҙҙә ниндәй ҡоштар ҡышлай? Уларға һеҙ нисек ярҙам итәһегеҙ?
(“Совет Башҡортостаны”)

9-сы класс башҡорт теле аҙнаһына 2сәғ

| № | Дәрес темалары | сәғ һаны | үтк. ваҡыты | фактик дата | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Телмәр | 1 | | | |
| 2 | Текст | 1 | | | |
| 3 | Телмәрҙең функциональ стилдәре. | 1 | | | |
| 4 | Фәнни стиль. | 1 | | | |
| 5 | Публицистик стиль. | 1 | | | |
| 6 | Нәфис әҙәбиәт теле. | 1 | | | |
| 7 | Телмәр мәҙәниәте. | 1 | | | |
| 8 | Сит тел һүҙҙәре. | 1 | | | |
| 9 | Реклама тексы. | 1 | | | |
| 10 | Телмәр хаталары. | 1 | | | |
| 11 | Тавтология. | 1 | | | |
| 12 | Интернет селтәрендә аралашыу этикеты. | 1 | | | |
| 13 | Телефондан һөйләшеү этикеты. | 1 | | | |
| 14 | Аралашыу интонацияһы | 1 | | | |
| 15 | Ҡабатлау. | 1 | | | |
| 16 | Һөйләмдә һүҙ тәртибе | 1 | | . | |
| 17 | Лингвистик һүҙлектәр. | 1 | | | |
| 18 | Фразеологик һүҙлек. | 1 | | | |
| 19 | Омонимдар һүҙлеге. Синонимдар һүҙлеге. | 1 | | | |
| 20 | Антонимдар һүҙлеге. | 1 | | . | |
| 21 | Кеше исемдәре һүҙлеге. Топонимик һүҙлек | 1 | | | |
| 22 | Башҡорт телендә фонетик процестар. | 1 | | | |
| 23 | Сингармонизм законы. Ирен гармонияһы | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 24 | Башҡорт теленең диалекттары | 1 | | | |
| 25 | Башҡорт теленең ерле һөйләш үҙенсәлектәре. | 1 | | | |
| 26 | Ерле һөйләш –проект эше | 1 | | | |
| 27 | Ҡушма һөйләм синтаксисы | 1 | | | |
| 28 | Теҙмә ҡушма һөйләм. | 1 | | | |
| 29 | Теркәүесле һәм теркәүесheҙ ҡушма һөйләм. | 1 | | | |
| 30 | Эйәртеүле ҡушма һөйләм | 1 | | | |
| 31 | Эйәрсән ҡушма һөйләм төрҙәре. | 1 | | | |
| 32 | Эйәрсән ҡушма һөйләм төрҙәре. | 1 | | | |
| 33 | Башҡорт телендә ҡатмарлы синтаксик конструкциялар | 1 | | | |
| 34 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | | | |
| 35 | Башҡорт алфавиты | 1 | | | |
| 36 | Башҡорт телендә ялғауҙар | 1 | | | |
| 37 | Исем | 1 | | | |
| 38 | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр | 1 | | | |
| 39 | Исемдәрҙең зат менән үҙгәреүе | 1 | | | |
| 40 | Яҙма эш :Экология 33-сө бит конспект | 1 | | | |
| 41 | Исемдәрҙең ялғауҙар менән үҙгәреүе | 1 | | | |
| 42 | Үҙ аллы эш | 1 | | | |
| 43 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше | 1 | | | |
| 44 | Һан .Һан төркөмсөләре | 1 | | | |
| 45 | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 | | | |
| 46 | Ҡылым | 1 | | | |
| 47 | Инша:  Шанлы тарих | 1 | | | |
| 48 | Ҡылымды ҡабатлау | 1 | | | |
| 49 | Сифатты ҡабатлау | 1 | | | |
| 50 | Сифаттың гр категориялары | 1 | | | |
| 51 | Контроль диктант Ҡыш | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 52 | Ҡабатлау дәресе Хаталар өҫтөндә эш | 1 | | | |
| 53 | Синтаксис 92-се бит | 1 | | | |
| 54 | Һүҙбәйләнеш төрҙәре Ярашыу, башҡарылыу | 1 | | | |
| 55 | Йәнәшәлек, һөйкәлеү | 1 | | | |
| 56 | Һүҙ һәм һөйләм | 1 | | | |
| 57 | Һөйләм киҫәктәре | 1 | | | |
| 58 | Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр | 1 | | | |
| 59 | Бер составлы һөйләмдәр | 1 | | | |
| 60 | Бер составлы һөйләм төрҙәре | 1 | | | |
| 61 | Йыллыҡ диктант | 1 | | | |
| 62 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 | | | |
| 63 | Тура  һәм ситләтелгән телмәр | 1 | | | |
| 64 | Тура телмәр | 1 | | | |
| 65 | Тура телмәрҙә тыныш билдәләре | | | | |
| 66 | Тура телмәрҙә тыныш билдәләре | 1 | | | |
| 67 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | | | |
| 68 | Йомғаҡлау | 1 | | | |

ҠУШЫМТА1

Контроль эштәр өсөн материалдар
Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В..Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5-9 синыф уҡыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө, “Китап”,2001.-256 бит.

**9 класс**

**Диктант № 1” Яугир менән ат “**

Һуғышта ҡатнашҡан һыбайлы һәм яугир яҡшы белә: атының ҡаты яраланып, ҡан һауған эсен тырҡылдатып, йән бирә алмай ятыуын күреүҙән дә ауыр йөрәк ғазабы юҡтыр.Тик хәҙерге киноларҙа ғына кавалерист, әгәр ҡаты яраланып ауһа, һә тигәнсе пистолетын сығара ла уға мөлдөрәп текләгән, күҙҙәренән соборлатып йәш ағыҙып ятҡан атының маңлайына терәп ата ла китә. Дөрөҫ түгел был, дөрөҫ түгел! Быға ышанмағыҙ! Һуғышҡа үҙең менән тире һеңешкән башын һәр саҡ яурыныңа һалып, бер ҡарағанда йәшкелт, ә икенсе ҡарағанда муйыл кеүек сөм-ҡара күҙҙәре менән һиңә йәнтәслим бирелгәнлеген тик әйтә генә алмай текләп торған. Мең ғаләм араһында һине бер кем менән дә бутамай, үҙәге өҙөлөп көткән атыңды үҙ ҡулың менән атып китеү- үҙеңдең йән дуҫыңды атып үлтереү менән бер ул. (Р.Өмөтбаев.)
191 бит.

**Диктант № 2 Бәхетле ҡартлыҡ**

Ҡунаҡтар оҙаҡ көттөрмәнеләр, иң элек ҡарсығы менән Ғариф ағай килде. Бригадир ҡунаҡҡа барғанда ғына һандыҡтан сығара торған төлкө тунын, ҡама бүркен, аяғына яңы бăймаһын кейеп, билен яҫы билбау менән ҡымтып быуған. Ҡунаҡҡа барған саҡта ҡупшы кейенеү- уның яратҡан ғәҙәте.Берҙән, ул быға кеше алдында үҙенде һынатмау, икенсенән, үҙҙәрен саҡырыусы хужаларҙы хөрмәтләү тип ҡарай. Шулай уҡ, уныңса, ҡунаҡҡа күстәнәсһеҙ барыу ҙа ҙур мөрәүәтһеҙлек һанала; уның был ҡылығын ҡарсығы Мәғфиә лә күптән үҙ итеп бөткән инде, ул да биш билле әҙрәс бишмәттән, эре суҡлы ҡалын шәлдән ине.
Улар иҫәнлек- һаулыҡ һораштылар. Шул арала уҡ Ҡадир, уларҙы ололап, сисендерә башланы. Ғариф ағай:
-Иртә килгән урын өсөн, һуңға ҡалған тамаҡ өсөн,-тип һөйләнә-һөйләнә, түр башына менеп тә ултырҙы.
- Бер ҙә ҡартая белмәйһең, ғариф ағай,- тине Ҡадир, уның етеҙ хәрәкәтенә һоҡланып.

-Ваҡыт юҡ, ҡустым, ваҡыт юҡ. Күкрәк киреп йәшәр саҡ етте,үлемдән отсрочка һорап торорға тура килер, навернай. (Б.Бикбай)

**Диктант № 3 “Телдән төшмәҫ”**

Рәми ағай Ғарипов йәштәрҙе яратыр ине. Ҡайһы бер абруйлы ағайҙар үҙҙәренең дәрәжәләре юғары булыуын мәле менән иҫкәртеп ҡуйһалар – ҙур шағир бер ваҡытта ла йәш дуҫтары алдында үҙенең өҫтөнлөгөн белгертмәне.Шунлыҡтан күңеле оло, үҙе бөйөк булды.

Арабыҙҙа Рәми ағай юҡ.

Донъялар буталып, әҙәп теҙгене бушап киткәндә:” Рәми ағай тере булһасы!”- тибеҙ.

Билдәлелек заманы килде.Рәми Ғариповтың ҡайһы бер хыялдары тормошҡа аша һымаҡ: республика суверенитет яуланы, халыҡ үҙенең бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың 100 йыллығын билдәләп үтте. Кеше күңел азатлығын яулағанда, туған телебеҙҙең киләсәге, уға дәүләт статусы өсн көрәш барғанда, йәнә: “Рәми ағай тере булһасы!”- тибеҙ.

Ярай әле, күңелдәренә халҡыбыҙҙың, Рәми Ғариповтың сая рухын алған, республикабыҙҙың, туған телебеҙҙең яҙмышы өсөн көрәшкән башҡорт улдары бар.

Күңелдәрҙе күкрәтер яҙ килә. Яҙ яҡынайғанда, хәтерҙә шағирҙың аманаты яңғырай:

Һөйләшһәләр әгәр туған телдә,
Телгә алыр улар мине лә.
Сөнки мин киләсәк менән бергә
Һаҡлап сыҡтым, телем, һине лә.

Халҡым йәшәгәндә, шағир исем телдән төшмәҫ. (Т. Йосопов.) 203 бит.

**Диктант № 4 Күңелле ине ул саҡтар**

Әсәһе сәләмәт саҡта, ҡайһылай күңелле ине! Улар ял көндәрендә Дим буйына сыға торғайнылар. Иртәнсәк тымыҡ урамдар буйлап, селәүсен тултырылған ҡалай банка тотҡан һәм, мылтыҡлы һалдат һымаҡ, ҡармаҡ һаптарын иңбашына һалған Сәлих иң алдан бара;уның артынан биҙрә күтәргән әсәһе; ә иң арттан, йоҡоһо асылып етмәгән Рәшиҙәне елкәһенә атландырып, атаһы атлай.

Өфө ултырған тауҙан һоҡланғыс күренеш асыла: тау аҫтында Ағиҙел тын ғына ағып ята; уға һалынған тимер күпер аша, төтөнөн аҡ шарфтай елберләтеп, поезд сығып бара; күперҙән бер ни тиклем үрҙәрәк Ағиҙелгә тымыҡ Дим килеп ҡушыла; ә йылға арьяғында күҙ иңләмәҫ яландар һәм урмандар. Тиҙерәк шул урмандарға!Һәм Сәлих тау аҫтына йүгереп төшөп китә.

Дим буйында улар балыҡ тоталар, тәмле балыҡ һурпаһы бешерәләр, һыу керәләр, ҡомға ятып, ҡояшта ҡыҙыналар, туйғансы йоҡлайҙар һәм кисен генә, күҙ бәйләнер алдынан ғына, өйгә ҡайталар ине.

Ә хәҙер Сәлих бер ҡайҙа ла сыға алмай: ауырыу әсәһен өс йәшлек һеңлеһе Рәшиҙәне ҡарар кеше юҡ.(Х.Мохтар.)

Ҡушымта 2

## Уҡытыу-методик һәм мәғлүмәти ресурс менән тәьмин ителеше

### Уҡытыу-методик әҙәбиәт

1. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аҡкужина Ф.А., Ҡарабаев М.И., Әминова З.Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2017. – 296 б.
2. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аҡкужина Ф.А., Ҡарабаев М.И., Әминова З.Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2017. – 340 б.
3. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аҡкужина Ф.А., Ҡарабаев М.И., Әминова З.Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2017. – 296 б.
4. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аҡкужина Ф.А., Ҡарабаев М.И. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2017. – 280 б.
5. Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аҡкужина Ф.А., Ҡарабаев М.И. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2017. – 268 б.

### Уҡыу ҡулланмалары

6. Ильмухаметов А. Г. Проектирование современного урока. – Уфа: Изд-во ИРО РБ, 2015. – 54 с.
7. Сафина Л. Х, Латыпова Р. М., Санъяров Ф. Б. Башкирский язык. Новый взгляд. – Уфа: Мир печати, 2021. – 94 с.

### Һүҙлектәр

8. Азнагулов Р. Г. Башкирско-русский, русско-башкирский школьный словарь. – Уфа: Китап, 2018. – 608 с.
9. Саяхова Л. Г. Русско-башкирский иллюстрированный тематический словарь. – Уфа: Китап, 1998. – 303 с.
10. Саяхова Л. Г., Усманова М. Г. Русско-башкирский, башкирско-русский учебный словарь (с грамматическим приложением). – Уфа, Учебно-методический центр «Эдвис», 2011. – 265 с.
11. Саяхова Л. Г., Ураксин З. Г., Асадуллина Ф. Ф., Сахипова З. Г. Русско-башкирский учебный словарь. – Уфа: Китап, 2011. – 452 с.

**Методик рекомендациялар**


12. Габитова З. М. Формирование универсальной учебной деятельности на уроках башкирского языка. – Уфа: Изд-во ИРО РБ, 2013. – 36 с.
13. Габитова З. М. и др. Методические рекомендации по составлению рабочей программы. – Уфа: ИРО РБ, 2015. – 52 с.


**Мәғлүмәти ресурс менән тәьмин ителеше**


14. Башкирская энциклопедия // URL: http: www.bashenc.ru (дата обращения: 23.06.2022).
15. Башкирские народные сказки // URL: http://skazkoved.ru/index.php?fid=1&sid=49 (дата обращения: 23.06.2022).
16. Башкирское издательство «Китап» имени Зайнаб Биишевой // URL: http: www.kitap-ufa.ru (дата обращения: 23.06.2022).
17. Детский обучающий интернет-портал «Балалар» // URL: https://balalar.org/ (дата обращения: 23.06.2022).
18. Детско-юношеский телеканал «Тамыр» ГУП ТРК «Башкортостан» // URL: http: tv-rb.ru/ (дата обращения: 23.06.2022).
19. Информационный портал Республики Башкортостан // URL: https://www.bashkortostan.ru/ (дата обращения: 23.06.2022).
20. Культурный мир Башкортостана // URL: http: ebook.bashnl.ru (дата обращения: 23.06.2022).
21. Международная система дистанционного обучения башкирскому языку // URL: https: //region.bspu.ru/mod/page/view.php (дата обращения: 23.06.2022).
22. Мобильное приложение «Башкирский филворд» // URL: https://bashlang.ru (дата обращения: 23.06.2022).
23. Мобильное приложение «Самоучитель по башкирскому языку» // URL: https://play.google.com/store/apps/details?id=com.bashkirteacher&hl=ur&gl=US (дата обращения: 23.06.2022).
24. Русско-башкирский онлайн словарь // URL: http: huzlick.bashqort.com/ (дата обращения: 23.06.2022).
25. Самоучитель башкирского языка // URL: http: leph.bashedu.ru/publications/samouchitel.pdf (дата обращения: 23.06.2022).

# <u>УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ БЕЛЕМДӘРЕН БАҺАЛАУ НОРМАЛАРЫ</u>

5 – се класс.

**1.Балаларҙың укыу һәләтлектәрен баһалау.**

<u>Уҡыу техникаһын тикшереү.</u>Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Аңлы һәм тасуири укыу күнекмәләрен үҫтереү.

<u>Ҡысҡырып уҡыу.</u> Уҡыу тиҙлеген эҙмә-эҙлекле үҫтереү.

<u>Эстән уҡыу.</u> Эстән укығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.

Уҡыу йылы уртаһында һәм аҙағында(цифрҙар шуны күрһәтә) балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

Һүҙ – 60-70

Билдә – 230-250

Эстән укыу – 95-110

**2. Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.**

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:

1) һүҙҙәрҙе, фразаларҙы һәм һөйләмдәрҙе күсереү;

2) һүҙлек диктанты

3) ғәҙәти диктанттар;

4) һорауҙарға яуаптар яҙыу;

**3.Контроль характерҙағы яҙма эштәрҙең төрө, һаны һәм күләме укыу йылы эсендә түбәндәгесә тәкдим ителә:**

**4.Яҙма эштәрҙе баһалау нормалары.**

*Диктанттарҙы баһалау.*

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр өсөн әҙерләнгән диктанттар тексына бөтә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр инә.Грамматик эштәр өҫтәп бирелгәндә, диктант текстары бер аҙ ҡыҫҡартыла.Орфограммаларҙың һәм пунктограммаларҙың дөйөм һаны түбәндәгеләрҙән артмаҫка тейеш:

III- 5/2 , IV-6/2 , V -8/3 VI-10/3 , VII -12/6, VIII-14/6, IX-16/6

Диктантты баһалағанда төҙәтелә, әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

Тупаҫ булмаған хаталар:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» - хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә: 1/0, 1/2, 0/2.

«4» - 2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион: 2/2, 1/3,2/3,3/3, 1/5, 0/7.

«3» - 4 орфографик, 4 пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион: 4/4, 3/5,3/6,

өс бер типтағы хата ебәрелһә, 6/6 хаталы эшкә лә өс ҡуйыла.

«2» - 9 орфографик, 9 пунктуацион: 8/10, 9/9.

«1» - уҡытыусы ҡарамағында

**6 – сы класс**

Яҙма эштәр.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Уҡыу йылы уртаһында һәм аҙағында(цифрҙар шуны күрһәтә) балаларҙың **уҡыу тиҙлеге** минутына түбәндәгесә билдәләнә:

Һүҙ – 75-85

Билдә – 250-280

Эстән уҡыу – 120-150

**7 – се класс.**

*Башҡорт теле дәрестәрендә рухи ҡиммәттәрҙең бирелеүе.*

1.Балаларҙы башҡорт халыҡ ижады, йыр-музыкаһы, театры, һынлы сәнғәте менән таныштырыу, күренекле яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен үҙләштереүенә ирешеү.

2.Уҡыусыларға башҡорт халҡының килеп сығышы, тарихи яҙмышы, сит илдәрҙәге милләттәштәребеҙҙең тормошо тураһында мәғлүмәттәр биреү;

3.Халыҡ тарихын һәм мираҫын өйрәнеү аша үҫмерҙәрҙә Ватанға, халыҡҡа, туған телгә мөхәббәт, ололарға, кеселәргә һәм, ғөмүмән, кешегә ихтирам мәрхәмәтлелек, шәфхәтлелек тәрбиәләү. Шулай уҡ хеҙмәт тәрбиәһе һәм эстетик тәрбиә биреү.

4.Киләсәк йәш быуынды мәрхәмәтле, шәфхәтле, туған яҡ тәбиғәтен һаҡлаусы һәм яратыусы кешелектең ыңғай сифаттарына эйә булған, милләт мәнфәғәттәрен яҡларҙай кеше итеп тәрбиәләү.

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары:**

Яҙма эштәрзең киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә бәла:

-һүҙҙәрҙе, типик фраза һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;

-һүҙлек диктанты;

-ғәҙәти диктанттар;

-һорауҙарға яуаптар яҙыу;

-изложениелар;

-иншалар;

-тестарға яуаптар яҙыу

.

**Диктанттар.**Диктант бер генә билдә менән баһалана.

“**5”**билдәһе – тупаҫ булмаған 1 орфографик,2 пунктуацион хата булған эшкә,

“**4”** билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хатаһы булған эшкә лә “4” билдәһе ҡуйырға мөмкин.

“**3”** билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә “3” билдәһе ҡуйырға мөмкин.

“**2”** билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.

Хата һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, **“1”** билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

**Изложениелар.**Был йыйынтыҡта изложение текстары ла тәҡдим ителә. Изложение текстары һәр класҡа айырым бирелә. Текстар балаларҙың йәшенән, белем кимәленән сығып уҡытыусы тарафынан һайлап алына. Рус телендә тәҡдим ителгән текстарҙы уҡыусы башҡорт телендә яҙырға тейеш була.

Изложение планын уҡыусы уҡытыусы ярҙамында төҙөй. Шул уҡ ваҡытта ул текст менән тағы ла бер тапҡыр таныша һәм хәтерендә нығыта.

**Инша.**Һәр класҡа инша темалары тәҡдим ителә. Бирелгән темаларҙың барыһына ла инша яҙырға тип, талап ҡуйылмай. Программала йыл барышында нисә инша яҙырға ҡаралған, шул күләмдә инша яҙылырға тейеш.

| | | |
|---|---|---|
| | **Яҙма эштәрҙең** | |
| | Диктант (70-75 һүҙ) | 5 |
| | Изложение (50-55 һүҙ) | 2 |
| | Инша (60-65 һүҙ) | 2 |

**Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау:**

Уҡыусыларҙың башҡортса уҡыу оҫталығын, телдән яуаптарын баһалағанда, уларға тәҡдим ителгән текстың(ғәҙәттә, хикәйәләү характерындағы проза әҫәре) йөкмәткеһен аңлап, тейешле тиҙлектә тасуири уҡыуы, һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыуы, интонацияны бирә белеүе, башҡалар ишетерлек һәм аңларлыҡ кимәлдә тыныс, шыма уҡыуы иҫәпкә алына.

Уҡыу йылы уртаһында һәм аҙағында(цифрҙар шуны күрһәтә) балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

Һүҙ – 95-110

Билдә – 300-320

Эстән уҡыу – 160-180

**8 – се класс.**

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары:**

Яҙма эштәрҙең киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә бәла:

-һүҙҙәрҙе, типик фраза һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;

-һүҙлек диктанты;

-ғәҙәти диктанттар;

-һорауҙарға яуаптар яҙыу;

-изложениелар;

-иншалар;

-тестарға яуаптар яҙыу.

**Диктанттар.**

Диктант бер генә билдә менән баһалана. “5” билдәһе – тупаҫ булмаған 1 орфографик,2 пунктуацион хата булған эшкә, “4” билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хатаһы булған эшкә лә “4” билдәһе ҡуйырға мөмкин. “3” билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә “3” билдәһе ҡуйырға мөмкин. “2” билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хата һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

**Изложениелар.**

Был йыйынтыҡта изложение текстары ла тәҡдим ителә. Изложение текстары һәр класҡа айырым бирелә. Текстар балаларҙың йәшенән, белем кимәленән сығып уҡытыусы тарафынан һайлап алына. Рус телендә тәҡдим ителгән текстарҙы уҡыусы башҡорт телендә яҙырға тейеш була.

Изложение планын уҡыусы уҡытыусы ярҙамында төҙөй. Шул уҡ ваҡытта ул текст менән тағы ла бер тапҡыр таныша һәм хәтерендә нығыта.

**Инша.**

Һәр класҡа инша темалары тәҡдим ителә. Бирелгән темаларҙың барыһына ла инша яҙырға тип, талап ҡуйылмай. Программала йыл барышында нисә инша яҙырға ҡаралған, шул күләмдә инша яҙылырға тейеш.

Программа материалы буйынса, башҡорт теленән 8 –се кластарҙа түбәндәге күләмдә контроль һәм яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

| | |
|---|---|
| Тест | 3 |
| Һорауҙарға яуап | 1 |
| Диктант (80-85) | 5 |
| Изложение(55-60) | 2 |
| Инша (65-70) | 2 |

**Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау:**

Уҡыусыларҙың башҡортса уҡыу оҫталығын, телдән яуаптарын баһалағанда, уларға тәҡдим ителгән текстың(ғәҙәттә, хикәйәләү характерындағы проза әҫәре) йөкмәткеһен аңлап, тейешле тиҙлектә тасуири уҡыуы, һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыуы, интонацияны бирә белеүе, башҡалар ишетерлек һәм аңларлыҡ кимәлдә тыныс, шыма уҡыуы иҫәпкә алына.

Уҡыу йылы уртаһында һәм аҙағында(цифрҙар шуны күрһәтә) балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

Һүҙ – 120-140

Билдә – 320-350

Эстән уҡыу – 180-200

**9 – сы класс.**

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары:**

Яҙма эштәрҙең киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә бөлә:

-һүҙҙәрҙе, типик фраза һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;

-һүҙлек диктанты;

-ғәҙәти диктанттар;

-һорауҙарға яуаптар яҙыу;

-изложениелар;

-иншалар;

-тестарға яуаптар яҙыу.

**Диктанттар.**

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

“**5**” билдәһе – тупаҫ булмаған 1 орфографик,2 пунктуацион хата булған эшкә,

“**4”** билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хатаһы булған эшкә лә “4” билдәһе ҡуйырға мөмкин.

“**3”** билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә “3” билдәһе ҡуйырға мөмкин.

“**2”** билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.

Хата һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә**, “1”** билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

**Изложениелар.**Был йыйынтыҡта изложение текстары ла тәҡдим ителә. Изложение текстары һәр класҡа айырым бирелә. Текстар балаларҙың йәшенән, белем кимәленән сығып уҡытыусы тарафынан һайлап алына. Рус телендә тәҡдим ителгән текстарҙы уҡыусы башҡорт телендә яҙырға тейеш була.

Изложение планын уҡыусы уҡытыусы ярҙамында төҙөй. Шул уҡ ваҡытта ул текст менән тағы ла бер тапҡыр таныша һәм хәтерендә нығыта.

**Инша.**Һәр класҡа инша темалары тәҡдим ителә. Бирелгән темаларҙың барыһына ла инша яҙырға тип, талап ҡуйылмай. Программала йыл барышында нисә инша яҙырға ҡаралған, шул күләмдә инша яҙылырға тейеш.

| Яҙма эш төрҙәре | Һаны |
|---|---|

| | |
|---|---|
| Диктант(90-95 һүҙ) | 5 |
| Изложение(60-65 һүҙ) | 2 |
| Инша(70-75 һүҙ) | 2 |

**Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау:**

Уҡыусыларҙың башҡортса уҡыу оҫталығын, телдән яуаптарын баһалағанда, уларға тәҡдим ителгән текстың(ғәҙәттә, хикәйәләү характерындағы проза әҫәре) йөкмәткеһен аңлап, тейешле тиҙлектә тасуири уҡыуы, һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыуы, интонацияны бирә белеүе, башҡалар ишетерлек һәм аңларлыҡ кимәлдә тыныс, шыма уҡыуы иҫәпкә алына.

Уҡыу йылы уртаһында һәм аҙағында(цифрҙар шуны күрһәтә) балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

Һүҙ – 150-180

Билдә – 350-400

Эстән уҡыу – 250-300

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;

-тест;

-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;

-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;

-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:

-һүҙлек диктанты;

-һөйләмдәр төҙөү;

-һүҙлек менән эш;

-һүрәтләү иншаһы;

-синквейн төҙөү (слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләм..)